Муниципальное автономное общеобразовательное учреждение
«Средняя общеобразовательная школа №30»
городского округа город Стерлитамак Республики Башкортостан

| Рассмотрено<br>на заседании ШМО учителей родных языков<br>Протокол № 4<br>от « 28 » августа 2023г.<br>Руководитель МО<br>Г.М.Фахретдинова | Согласовано<br>с заместителем директора<br>А.И.Емельяновой<br>«29»августа 2023г. | Утверждено<br>директором<br>МАОУ «СОШ№30»<br>О.А.Валикова<br>Приказ № 388<br>от «29 »августа 2023 г. |
|---|---|---|

# Рабочая программа по государственному (башкирскому) языку Республики Башкортостан для 7-9 классов

Составители учителя башкирского языка:

Абдуллина Л.Р., Багаутдинова Э.М.,Фахретдинова Г.М.

Стерлитамак

2023

Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла. «Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» законы, Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» законы, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы. 27.02.2019 йылғы № 192-з бойороғо.

## I .Уҡыу –уҡытыу программаһында планлаштырылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштереү.

Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына(п.18.2.2) ярашлы Башҡортостан Мәғариф Министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән программа «30-сы төп дөйөм белем биреү мәктәбе» муниципаль автономлы дөйөм белем биреү учреждениеһының программаһы планлаштырылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштерә .

### 7-се класс

*Шәхси һөҙөмтәләре*

1. Үҙ аллы эш итеү, белем алыу процесына етди һәм яуаплы ҡарау.
2. Атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә, уҡытыусыларға, яҡындарына, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы булыу.
3. Мәктәп йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына ҡарата һаҡсыл булыу.
4. Тыуған илде,тыуған ерҙе яратыу, ерҙе, телде һаҡлау.
5. Һаулыҡты нығытыу.
6. Тыуған ил, туған тел матурлығын, күркәмлеген тоя белеү, уларҙы һаҡлау, үҙ халҡының традицияларын, йолаларын өйрәнеү, таратыу.
7. Йәмғәт урындарында әҙәпле булыу, файҙалы ял итеү.
8. Кеше менән аралашыу этикетын үҙләштереү.

*Метапредмет һөҙөмтәләре*

1. Уҡыу процесына яуаплы ҡарау, маҡсат ҡуйыу, эште планлаштыра белеү, уҡыу мәсьәләләрен сисә белеү.
2. Теге йәки был тема буйынса кәрәкле мәғлүмәт туплау, эҙләнеү эше алып барыу, уның буйынса презентация эшләй белеү.
3. Мәҙәни аралашыу оҫталығына, телмәр этикетына эйә булыу, үҙ фекерен яҡлағанда, уй-тойғоларын еткерә алырлыҡ анығ, эҙмә-эҙ бәйән итеү, әңгәмәсенең уй-тойғоларын аңларға тырышыу, уның менән иҫәпләшә һәм уртаҡ фекергә килә белеү.
4. Билдәле кимәлдә башҡорт теленең лексик-фразеологик минимумын үҙләштереү һәм телмәрҙә ҡуллана белеү.

*Предмет һөҙөмтәләре*

1. Һүрәтләү, хикәйәләү тибындағы текстарҙы тыңлау һәм аңлап ҡабул итеү.
2. Бирелгән тема буйынса диалог төҙөү; диалогты дауам итеү.
3. Программала бирелгән шиғырҙарҙы яттан тасуири һөйләй белеү.
4. Тексты дөрөҫ, аңлы, тасуири уҡыу.
5. Диктанттар, иншалар, һорауҙарға яуаптар яҙыу; иптәшең яҙғанын һәм үҙ яҙмаларыңды тикшереү, камиллаштыра белеү күнекмәләре.
6. Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен билдәләү.
7. Өйҙә башҡортса гәзит-журналдар, китаптар уҡыу һәм класта шулар тураһында фекер алышыу (кластан тыш уҡыу күнекмәләре).
8. Географик атамаларҙы, билдәле балалар әҫәрҙәренең персонаждарын, популяр әкиәттәрҙең сюжеттарын, балалар фольклорының ҙур булмаған әҫәрҙәрен (шиғырҙар, йырҙар) белеү.
9. Кешенең исеме, фамилияһы, географик атамаларҙың дөрөҫ яҙылышын практик үҙләштереү.

### 8-се класс

*Шәхси һөҙөмтәләре*

1. Үҙ аллы эш итеү, белем алыу процесына етди һәм яуаплы ҡарау.
2. Атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә, уҡытыусыларға, яҡындарына, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы булыу.
3. Мәктәп йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына һаҡсыл булыу.
4. Тыуған илде, тәбиғәтте, дуҫтарҙы яратыу һәм ҡәҙерләү, ерҙе, телде һаҡлау.
5. Һаулыҡты нығытыу.
6. Почта бүлексәһендә, ҡунаҡта, кинола йәки экскурсия һәм башҡа йәмғәт урындарында әҙәпле булыу, файҙалы ял итеү.

*Метапредмет һөҙөмтәләре*

1. Үҙ аллы уҡыу, мәғлүмәтле булыу оҫталығын камиллаштырыу; тикшеренеү-эҙләнеү эшен планлаштырыу; парлап, төркөмләп, команда менән эшләү.
2. Алған мәғлүмәтте ҡағыҙға теркәү.
3. Билдәләмә, ҡағиҙә, алгоритм, һығымта һ.б. график схема, модель, таблица ярҙамында теркәү.
4. Диалог ҡороу, уҡыу материалын тикшереү, анализлау, һығымта яһау.
5. Мәҙәни аралашыу этикетына өйрәнеү; үҙ фекереңде ҡыҫҡа һәм аңлайышлы итеп еткереү, уны яҡлай белеү.

*Предмет һөҙөмтәләре*

1. Уҡытыусының һөйләгәнен йәки уҡығанын аңлай алыу:
- тексты тыңлау һәм йөкмәткеһен һөйләү, йөкмәтке буйынса рәсем яһау;
- текст буйынса иптәштәренә йәки уҡытыусыға һорауҙар биреү;
- программа тарафынан ятлау өсөн тәҡдим ителгән әҫәрҙәрҙең текстарын яттан белеү.
2. Тексты аңлы уҡыу һәм уның йөкмәткеһе менән бәйләнгән эштәрҙе эҙмә-эҙлекле үтәү. Уның нигеҙендә ҡоролған һөйләшеү йәки тикшереү эштәрен үтәү. Тексттың планын төҙөү.Тексттың йөкмәткеһен план буйынса һөйләү.
3. Уҡыу ситуацияһына ярашлы диалогта ҡатнашыу.
4. Диктанттар, иншалар, изложение яҙыу.
5. Төрлө тип һөйләмдәрҙә тыныш билдәләрен ҡуя белеү. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен айыра белеү. Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен айыра белеү.

**9-сы класс**

*Шәхси һөҙөмтәләре*

1. Үҙ аллы эш итеү, белем алыу процесына етди һәм яуаплы ҡарау.
2. Атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә, уҡытыусыларға, яҡындарына, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы булыу.
3. Мәктәп йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына һаҡсыл булыу.
4. Тыуған илде, тәбиғәтте, дуҫтарҙы яратыу һәм ҡәҙерләү, ерҙе, телде һаҡлау.
5. Һаулыҡты нығытыу.
6. Почта бүлексәһендә, ҡунаҡта, кинола йәки экскурсия һәм башҡа йәмәғәт урындарында әҙәпле булыу, файҙалы ял итеү.

*Метапредмет һөҙөмтәләре*

1. Үҙ аллы уҡыу, мәғлүмәтле булыу оҫталығын камиллаштырыу; тикшеренеү-эҙләнеү эшен планлаштырыу; парлап, төркөмләп, команда менән эшләү.
2. Алған мәғлүмәтте ҡағыҙға теркәү.
3. Билдәләмә, ҡағиҙә, алгоритм, һығымта һ.б. график схема, модель, таблица ярҙамында теркәү.
4. Диалог ҡороу, уҡыу материалын тикшереү, анализлау, һығымта яһау.
5. Мәҙәни аралашыу этикетына өйрәнеү; үҙ фекереңде ҡыҫҡа һәм аңлайышлы итеп еткереү, уны яҡлай белеү.

*Предмет һөҙөмтәләре*

1. Уҡытыусының һөйләгәнен йәки уҡығанын аңлай алыу:
- тексты тыңлау һәм йөкмәткеһен һөйләү, йөкмәтке буйынса рәсем яһау;
- текст буйынса иптәштәренә йәки уҡытыусыға һорауҙар биреү;
- программала бирелгән шиғырҙарҙы яттан белеү.
2. Тексты аңлы уҡыу һәм уның йөкмәткеһе менән бәйләнгән эштәрҙе эҙмә-эҙлекле үтәү. Уның нигеҙендә ҡоролған һөйләшеү йәки тикшереү эштәрен үтәү.
3. Уҡыу ситуацияһына ярашлы диалогта ҡатнашыу.
4. Диктант, изложение һәм иншалар яҙыу.
5. Эпик, лирик, лироэпик һәм драматик әҫәрҙәрҙе айыра белеү.
6. Өндәш һүҙҙәр, улар эргәһендә тыныш билдәләренең ҡуйылышын, һүҙҙәрҙә яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарҙың килеү тәртибен практик үҙләштереү.

## II . Уҡыу предметының төп йөкмәткеһе.

“Башҡорт теле” (7-9-сы) уҡыу ҡулланмаһына өлгө программалар; уҡытыу рус телендә алып барылған төп дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн (башҡорт телен дәүләт теле буларaҡ өйрәнеүселәр өсөн)/ төҙөүселәре: Ғәбитова З.М. – Өфө: Китап, 2020. Башҡорт телен сәғәт

күләмендә уҡытыуҙы күҙ уңында тота (7 кластарҙа аҙнаһына 1 сәғәт , 8кластарҙа аҙнаһына 1 сәғәт иҫәбенән 34 уҡыу аҙнаһы, 9кластарҙа аҙнаһына 1 сәғәт иҫәбенән , 33 уҡыу аҙнаһы)

**7 класс (34 сәғәт)**

**Яңынан мәктәпкә (3 сәғәт)**

5-6-сы кластарҙа алған белемдәрҙе тулыландырыу. Был тема буйынса яҙыусылар, шағирҙар ижады менән таныштырыу, яңы текстар уҡыу. Диалог һәм монолог ярҙамында бәйләнешле һөйләм төҙөү дауам итә. Туған тел, белем, уҡытыусы, мәктәп һәм көҙгө байлыҡ тураһында һөйләшеү күберәк урын ала. Бәйләнешле текст төҙөү, бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү күнегеүҙәре башҡарыла. Көҙ, көҙгө эштәр, уңыш йыйыу темаһы төп урындарҙың береһен алып тора.

Мәктәп, уҡыу, китап, икмәк, уңыш, емеш-еләк тураһында мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтар менән танышыу.

Грамматика: 6-сы класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**Ауыл тормошо (4 сәғәт)**

Ауыл тормошо, ауыл кешеләренең көнкүреше, хеҙмәт, игенсе хеҙмәте тураһында әңгәмәләр үткәреү. Игенсе эшенең нескәлектәрен һөйләү. Ауыл тормошоноң ҡала тормошонан айырмалы яҡтары тураһында аңлатыу. Ауыл еренән сыҡҡан күренекле шәхестәрҙең тормош юлы менән таныштырыу, осрашыуҙар ойоштороу. Был тема буйынса яҙылған әҫәрҙәр уҡыу.

Грамматика: Ҡылым. һүҙбәйләнеш. һөйләм төҙөлөшө.

**Башҡортостан буйлап сәйәхәт (4 сәғәт)**

Башҡортостан тураһында 1-6 кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлап, белгән фактик материалды эҙмә-эҙлекле итеп һөйләргә өйрәнеү. Был тема буйынса уҡыусыларға яңы мәғлүмәт биреү. Тыуған еребеҙҙең сал тарихы барлығын, Башҡортостан тураһында рус яҙыусылары, «Урал» эпосы, һуңғы йылдарҙағы тарихи Башҡортостан ерендә үткәрелгән фәнни экспедициялар мәғлүмәттәре менән таныштырып китеү («Арҡайым», «Сынташты», боронғо ҡалалар, алтын әйберҙәр табыу һ.б. тураһында), быныӊ өсөн һуңғы йылдарҙа сыҡҡан матбуғат баҫмаларына мөрәжәғәт итеү. Был тема буйынса тәҡдим ителгән әҫәрҙәр менән танышыу, уҡыусыларҙың яҙыу һәм һөйләү телмәрен үҫтереү өҫтөндә эш алып барыла.

Грамматика: Яңғыҙлыҡ исемдәр.

**Спорт. Спорт кәрәк-яраҡтары (4 сәғәт)**

Кешегә сәләмәт булыу өсөн спорт менән шөғөлләнергә кәрәк икәнлеген аңлатыу һәм был турала уҡыусылар менән һөйләшеү, әңгәмә ойоштороу. Уҡыусылар үҙҙәре спорт менән ҡыҙыҡһыныуҙары, күренекле спортсмендар тураһында һөйләргә өйрәтеү. Спорт тураһында теле-радио тапшырыуҙары, газета материалдары буйынса һөйләү.

Башкортостанда спорт төрҙәре. Спорт өлкәһендә данлыҡлы кешеләр.

Грамматика: Башҡорт теленең үҙенсәлекле хәреф, өндәре, һөйләм төрҙәре.

**Мин һәм беҙҙең ғаилә (2 сәғәт)**

Уҡыусы үҙенең ғаиләһе тураһында тулы һәм иркен һөйләй белергә тейеш. Сөнки был тема йылдан-йыл ҡабатлана. Ғаилә ағзаларын дөрөҫ атау, уларға ихтирамлы, иғтибарлы булырға өйрәтеү. Ғаилә, ғаилә ағзалары тураһында яҙылған әҫәрҙәр уҡыу, уларҙы аңлы ҡабул итергә өйрәтеү, һөйләү күнекмәләрен үҫтереү. Уҡылған әҫәрҙәр буйынса план төҙөргә өйрәтеү, план буйынса һөйләү. Телмәр үҫтереүгә айырым иғтибар бирелә. Был бүлектә билдәле рәссамдарҙың әҫәрҙәре күп кенә урын алған. Картинаны ҡарай, аңлай һәм уның йөкмәткеһен һөйләргә өйрәтеү.

Грамматика: Ҡылым. Ҡылымдарҙың заман, зат, һан менән үҙгәреше.

**Сәнғәт оҫталары. (3 сәғәт)**

Республиканың данлыҡлы һәм арҙаҡлы шәхестәре менән танышыуҙы дауам итеү. Сәнғәт оҫталарының тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу. Теле-радио тапшырыуҙар, яҙмалар ҡарау. Уларҙың әҫәрҙәрен таныу, данлыҡлы кешеләребеҙ тураһында һөйләй белеү. Йырҙар өйрәтеү, бергәләп йырлау, һәләтле балалар менән йырҙар өйрәнеү. Мәктәп сәхнәһе өсөн концерт номерҙары әҙерләү.

Грамматика: Эйәртеү теркәүестәре. Теркәүестәрҙең дөрөҫ яҙылышы. Теркәүес темаһын нығытыу.

**Исемең матур, кемдәр ҡушҡан? (2 сәғәт)**

Был тема кеше исемдәренән башҡа тау, ер, һыу атамалары мөнән берлектә алып барыла. Исемдәрҙең мәғәнәһе, уның кеше холоҡ-фиғеленә тәьҫир итеүе. Данлыҡлы кешеләрҙең исемдәренә

бәйләп, төрлө тарихи ваҡиғалар һөйләү, әҫәрҙәр уҡыу. Атамалар буйынса легендалар, риүәйәттәр уҡыу ҙа дәрестәрҙе ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс итеп үткәрергә ярҙам итәсәк.

«Исемдәрҙә – ил тарихы», «Исемең матур, кемдәр ҡушҡан?» темаһына иртәлектәр үткәреү, уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен үҫтерергә, кеше алдында сығыш яһау өсөн ярҙам итәсәк.

Грамматика: Бәйләүестәр. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәһен ҡабатлау.

**Борон-борон заманда... (3 сәғәт)**

Башҡорт халыҡ ижады темаһын киңәйтеү, уҡыусыларҙың белгәндәрен тулыландырыу, һүҙ байлығын, һөйләү телмәрен үҫтереү маҡсат булып тора. Күберәк иғтибарҙы тексты аңлы ҡабул итеү һәм йөкмәткеһен һөйләй белеүгә йүнәлтеү. Бында башҡорт халыҡ әкиәттәренән башҡа, Ф.Туғыҙбаеваның «Тайыштабан ниңә уйнарға сыҡманы?» әкиәте лә урын алған. Уларҙың айырмаһын билдәләп үтеү кәрәк.

Грамматика: Киҫәксә тураһында төшөнсә.Киҫәксәләрҙең бүленеше. Киҫәксәләрҙең дөрөҫ яҙылышы.

**Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ (3сәғәт)**

Иң төп темаларҙың береһе - берҙәмлек, дуслык, тыныслыҡ. Бында тик кешеләр араһындағы дуҫлыҡ тураһында ғына һөйләшеү бармаясаҡ, ә халыҡ-ара булған мөнәсәбәттәр ҙә иғтибар үҙәгендә торорға тейеш. Был тема буйынса уҡыусыларҙы аңлап фекер йөрөтөргә һәм һөйләй белергә өйрәтеү. Уҡылған әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһе буйынса фекер алышыу, әңгәмә ойошторо у.

Грамматика: Мөнәсәбәт һүҙҙәр. Ымлыҡтар. Уларҙың дөрөҫ яҙылышы.

**Йәмле йәй ( 3сәғәт)**

Йәй миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү. Уҡыусыларҙың һүҙ байлығын арттырыу, һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү. Тәбиғәтте күҙәтеү, алған тәьҫораттар буйынса фекер алышыу. Был айҙарҙа уҙғарылған Милли байрамдар менән таныштырыу, улар тураһында белгәндәрен һөйләү. Балаларҙың йәйге ялы, хеҙмәте, ололарға ярҙамы тураһында әҫәрҙәр уҡыу һәм әңгәмәләр үткәреү.

Грамматика: 7-се класта үткәндәрҙе ҡабатлау, дөйөмләштереү.

**8 класс (34 сәғәт)**

**Мәктәпкә барабыҙ -5 сәғәт.**

Был тема буйынса 5-7 кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау, һүҙлек байлығын арттырыу. Тема буйынса эҙмә-эҙлекле һөйләмдәр төҙөтөү, ҡыҫҡа ғына хикәйә төҙөргә өйрәтеү. Текст өҫтөндә эшләү,план төҙөү, план буйынса һөйләү. Мәктәп, класс торошо һ.б. хаҡында әңгәмәләр ойошторо у. Белем, китап тураһында мәҡәлдәр ҡойоу.

5-7 кластарҙа үтелгәндәрҙе иҫкә төшөрөү. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү.

**Көҙгө эштәр һәм көҙгө күренештәр - 5 сәғәт.**

Көҙгө үҙгәрештәрҙе бергәләп күҙәтеү, кешеләрҙең көҙгө хеҙмәтен күҙәтеү. Темаға ҡағылышлы текстар уҡыу. Муллыҡ, хеҙмәт тураһында мәҡәл, әйтемдәр менән танышыу. Һынамыштар уҡыу.

Синтаксис. Маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәре. Логик баҫым. Исем менән ҡылымды ҡабатлау.

**Өфө менән танышыу - 5 сәғәт.**

Өфө - башҡортостандың баш ҡалаһы. Өфө ҡалаһы, уның үткәне, бөгөнгөһө тураһында әңгәмә үткәреү. Уның иҫтәлекле урындары тураһында һөйләшеү, һүрәттәр ҡарау. Һөйләм телмәрен үҫтереү. Рефераттар яҙҙырыу һәм уны класс алдында ҡыҫҡаса һөйләтеү кеүек эштәр ҡулланырға мөмкин.

Башҡорт ҡылымдарының төҙөлөшө. Барлыҡ төшөнсәһе һәм уның бирелеше.

**Хеҙмәт төбө – хөрмәт - 4 сәғәт.**

“Кеше тормошонда хеҙмәттең роле” тигән темаға әңгәмә ҡороу. Данлыҡлы хеҙмәт ветерандары менән осрашыу ойошторо у. Уҡыусыларға ниндәй һөнәр оҡшауы тураһында һөйләтеү, яңы мәғлүмәттәр биреү. Һөнәрҙәр тураһында шиғырҙар, хикәйәләр уҡыу. Хеҙмәт , һөнәрҙәр тураһында мәҡәлдәр өйрәнеү.

Ябай һөйләм. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйә менән хәбәрҙең ярашыуы. Юҡлыҡ, булмағанлыҡ төшөнсәләре.

**Беҙ ҡайтырбыҙ йондоҙҙарға әүерелеп…- 4 сәғәт.**

Башҡорт халҡының Бөйөк Ватан һуғышындағы ҡаһарманлығы тураһында һөйләшеү. Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, батырҙары тураһында мәғлүмәт йыйыу, презентациялар эшләү, хәтер кисәләре, осрашыуҙар үткәреү.

**Ай Уралым, Уралым... – 6 сәғәт.**

Башҡортостан, уның үткәне, бөгөнгөһө хаҡында әңгәмә үткәреү. Республикабыҙҙың күренекле урындары менән таныштырыу. Йәйге тәбиғәтте күҙәтеү, ололарҙың һәм балаларҙың йәйге эштәре тураһында диолог һәм монологтар төҙөү.
8-се класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**Ҡыш – 4 сәғәт.**
Ҡыш миҙгеле тураһында белгәндәрҙе системалаштырыу, һүҙлек байлығын арттырыу кеүек эштәр ентекле алып барыла. Ҡыш тураһында текстар, шиғырҙар, мәҡәлдәр, һынамыштар уҡыу, яңы йылға бағышланған йырҙар, мәҡәл һәм әйтемдәр. Яңы йыл менән ҡотлау открыткаһы яҙырға өйрәнеү.
Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ.

Салауат Юлаев – халҡыбыҙҙың милли батыры - 5 сәғәт.

С.Юлаевтың биографияһы, ижады менән танышыу. Уның шиғырҙарын ятлау, шиғырҙарының һаҡланыу тарихы тураһында әңгәмә ойоштороу. С.Юлаевтың тормошо, батырлығы, ижады тураһында уҡыусыларҙан төрлө ижади эштәр эшләтеү. ( Һүрәттәр төшөрөү, изложение яҙыу, стенгәзит сығарыу)һ.б.
Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре тураһында төшөнсә. Аныҡлаусы.

**Йәмле яҙ, һағындыҡ һине! - 2 сәғәт.**
Яҙ миҙгеле тураһында белемдәрҙе системалаштырыу. Яҙғы байрамдар- 1 Май һәм Еңеү байрамы тураһында һөйләшеү. Яҙғы тәбиғәт күренештәре, ҡоштарҙы ҡаршылау, баҡса эштәре тураһында әңгәмәләр үткәреү.
Тултырыусы.

Хәл.

9 класс ( 34 сәғәт)

Һаумы, мәктәп! 5 сәғәт.

Эш төрҙәре «Көҙ» темаһы менән берлектә алып барыла. «Көҙ» һәм «Мәктәп» темаһына шиғырҙар, әҫәрҙәр уҡыу; мәҡәл, әйтемдәр, йомаҡтар, һынамыштарҙы иҫкә төшөрөлә.

Алдағы кластарҙа үтелгәндәрҙе системалаштырыу, яңы мәғлүмәт менән таныштырыу. Һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү өҫтөндә эш дауам итеү. 8-се класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Ябай һөйләм. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре.

**Ергә мәрхәмәт – илгә бәрәкәт. 5 сәғәт.**

Тыуған Республикаға ҡарата мөхәббәт, ғорурлыҡ тойғоһо, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләргә. Улар тураһында һөйләргә, яҙырға өйрәтеү. Башҡортостандың ер аҫты, ер өҫтө байлыҡтары тураһында әңгәмәләр үткәреү, экскурсиялар ойоштороу

Ҡылым, исем, хәл тураһында белемдәрен системалаштырыу. Рәүеш хәле. Урын хәле. Ваҡыт хәле.

**Атамалар ни һөйләй? 5 сәғәт.**

Кеше тормошонда атамаларҙың да (кеше исеме, фамилияһы, атаһының исеме; ауыл, ҡала, тау, йылға һ.б.) роле ҙур. Унһыҙ тормошто күҙ алдынала килтереп булмай. Атамалар бик күп. Тел ғилемендә уларҙы өйрәнеүсе фән бар. Ул – ономастика. Онамастика фәне үҙе бер нисә тармаҡтан тора: антропонимика, этнонимика, милли, халыҡ, ҡәбилә исемдәрен, зоонимика ҡош-ҡорт, хайуан ҡушаматтарын, космонимика өйрәнеүсе фән.

Был теманы үтеү уҡыусының бала саҡтан уҡ үҙҙәре йәшәгән ауыл, ҡала, уларҙың янындағы атамаларҙың мәғәнәләрен белергә теләгән ҡыҙыҡһыныуын ҡәнәғәтләндерә, тыуған төйәк менән ғорурланырға мөмкинлек бирә. Сөнки атамаларҙа ил тарихы, ер һәм ошо ерҙә йәшәгән халыҡтың тел үҙенсәлектәре, халаҡ тормошо, ғөрөф-ғәҙәте, йолалары һ.б. сағыла. Хәл темаһын нығытыу.

**Беҙ ҡышты ла яратабыҙ. 3 сәғәт.**

Бәйләнешле телмәрҙең яҙма һәм телдән формаларына берҙәй әһәмиәт бирелә. Ҡыш миҙгеле, уның үҙенсәлектәре тураһында һөйләү күҙ уңында тотола. Хәл темаһын нығытыу. Өндәш һүҙ тураһында өйрәнеү. Өндәш һүҙ янында тыныш билдәләре..

**Башҡорт театры. 5 сәғәт.**

Башҡортостанда театр сәнғәте. Республикалағы театрҙар һәм уларҙың эшмәкәрлеге хаҡында дөйөм мәғлүмәт биреү. М.Ғафури исемендәге Башҡорт Академия драма театрының барлыҡҡа килеүе тарихы (халыҡ артистары З.Бикбулатова, А.Мөбәрәков, Г.Мөбәрәкова). Театрҙың күренекле артистарының тормошо һәм ижады менән таныштырыу, улар тураһында һөйләргә өйрәтеү. Театрҙың

үткәне һәм киләсәге буйынса фекер алышыу ойоштороу. Өҫтәлмәлелек тураһында белешмә биреү. Ябай һөйләм тураһында ҡабатлау.

**Башҡорт халыҡ ижады. 5 сәғәт.**

Халыҡ ижады тураһында дөйөм төшөнсә. Фольклорҙың коллектив ижад булыуы. Фольклор һәм яҙма әҙәбиәттең айырмаһын билдәләү, улар тураһында һөйләргә өйрәтеү. Ябай һөйләм төрҙәрен аңлатыу.

**Башҡорт аты. 2 сәғәт.**

Уҡыусылырҙы башҡорт атының килеп сығыуы, тарихи үткәне менән таныштырыу. Аттарҙың кеше тормошондағы мөһим ролен билдәләү. Йәш үҙенсәлектәре буйынса бүленеүен билдәләү, уҡыусылырҙан дөрөҫ итеп әйттереү. Аттарға ҡарата ҡыҙыҡһыныусанлыҡ, улар тураһында күберәк белеү теләге тыуҙырыу. Ябай һөйләм төрҙәрен ҡабатлау, нығытыу. Тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе өйрәнеү. Тиң киҫәктәр эргәһендә тыныш билдәләре. Тиң киҫәктәр эргәһендә дөйөмләштереүсе һүҙҙәр.

**Башҡорт халыҡ милли аштары. 2 сәғәт.**

Башҡорт халҡының милли аштары менән таныштырыу. Уларҙы әҙерләү үҙенсәлектәрен билдәләү. Башҡорт милли аштары тураһында текстар менән таныштырыу.Уҡыусылырҙың һөйләү, яҙыу телмәрен үҫтереү өҫтөндә ентекле эш дауам итә. Ҡушма һөйләм тураһында белешмә биреү.

**Күңелле яҙ килә. 2сәғәт.**

Башҡортостандағы яҙғы тәбиғәт күренештәре. Ҡала һәм ауылда яҙғы эштәр: ҡоштар, хайуандар һәм үҫемлектәр тормошо, яҙғы байрамдар тураһында әңгәмәләр үткәреү. Тәбиғәткә экскурсиялар ойоштороу. Дарыу үләндәренән гербарийҙар төҙөү, Еңеү көнөн билдәләү. Һуғыш ветерандары менән осрашыу, иҫтәлектәр яҙып алыу буйынса эш дауам итә. Йыл буйына үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

## III. Тематик планлаштырыу.

| № | Бүлек (сәғәттәр һаны) | Уҡыусыларҙың эшмәкәрлек төрҙәре | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | 7 | 8 | 9 | |
| 1. | Һаумы, мәктәп! Һаумы, уҡытыусым! (13сәғәт) | 3 | 5 | 5 | Тема буйынса мәғлүмәтте ҡабул итергә.<br>Уҡытыусының һорауҙарына яуап бирергә.<br>Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен һәм хәрефтәрен дөрөҫ әйтергә.<br>Тема буйынса яңы һүҙ һәм һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштерергә.<br>Яңы үҙләштерелгән һүҙҙәр ярҙамында бәләкәй хикәйәләр, диалогтар төҙөргә.<br>Исемдәрҙең һан менән үҙгәрешен күҙәтергә һәм практик үҙләштәрергә.<br>Сифаттарҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланырға.<br>Тыуған ил, тыуған ер, тыныслыҡ, дуҫлыҡ, мәктәп темалары буйынса әңгәмәлә ҡатнашырға. Һәр тема буйынса һөйләй белергә. Һорауҙарға яуап бирергә. Һөйләмдәрҙе дөрөҫ итеп төҙөргә. Үҙенде илдең лайыҡлы шәхесе итеп үҫтерергә. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | Мәктәп, уҡыу, китап, икмәк, уңыш, емеш-еләк тураһында мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтар менән танышырға. Тема буйынса тулы текст төҙөргә, эҙмә-эҙлекле һөйләргә, мәктәп, класс тормошо хаҡында ҡыҫҡа ғына хикәйә төҙөргә өйрәнергә. Текст өҫтөндә эшләргә, план төҙөргә, план буйынса һөйләргә. Һөйләү һәм яҙма телмәрен үҫтерергә. |
| 2. | Башҡортостанды беләһеңме? (4сәғәт) | 4 | | | Тема буйынса яңы һүҙ һәм һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштерергә. Уҡытыусының һорауҙарына яуап бирергә. Телмәрҙә яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәрҙе дөрөҫ ҡулланырға. Республика, уның тарихы, күренекле шәхестәре, байлыҡтары тураһында әңгәмәлә ҡатнашырға, диалог төҙөргә. Башҡортостан тураһында иркен һөйләй һәм конкрет факттарҙы ҡуллана белергә. Һөйләү телмәрен үҫтерергә һәм ижади эштәр башҡарырға. Башҡорт телендә эйәлек төшөнсәһен, эйәлек зат ялғаулы исемдәрҙең килеш менән үҙгәрешен, сифат, уның дәрәжәләрен, синоним, антоним, омоним буйынса грамматик темаларҙы үҙләштерергә, аңлата белергә. Тыуған еребеҙҙең сал тарихы барлығын, Башҡортостан тураһында рус яҙыусылары, “Урал” эпосы, һуңғы йылдарҙағы тарихи Башҡортостан ерендә үткәрелгән фәнни экспедициялар тураһында әңгәмәлә ҡатнашырға. Һорауҙарға тулы яуап бирергә, диалог төҙөргә. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе үҙләштерергә. |
| 3. | Яңы йыл менән! (7 сәғәт) | | 4 | 3 | Ҡыш миҙгеле буйынса белемде артабан үҫтерергә. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | Ҡылымдарҙың зат һәм һан менән үҙгәрешен күҙәтергә һәм практик үҙләштерергә. Темаға ярашлы һүҙҙәрҙе хәтерҙә ҡалдырырға. Уҡыған әҫәрҙең йөкмәткеһе буйынса һорауҙарға яуап бирергә. Диалогта ҡатнашырға. |
| 4. | Яҙ етте. (4сәғәт) | | 2 | 2 | Уҡытыусының һөйләгәнен тыңларға, аңларға. Темаға ярашлы һүҙҙәрҙе хәтерҙә ҡалдырырға. Диалогта ҡатнашырға. Һүҙлек һүҙҙәрен белергә, уларҙы дөрөҫ ҡулланырға. Яҙғы тәбиғәт: ҡоштар, йәнлектәр, ағастар, сәскәләр тураһында шиғырҙар, хикәйәләр уҡырға һәм һөйләргә. Яҙ миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләй һәм һөйләй белергә. Дарыу үләндәре, осоп килеүсе ҡоштар тураһында әңгәмәлә ҡатнашырға, уларҙың исемдәрен дөрөҫ билдәләргә. Яҙғы байрамдар тураһында һөйләй белергә, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы ветерандарҙың үткән юлы тураһында әңгәмәлә ҡатнашырға. Һорауҙарға дөрөҫ һәм тулы яуап бирергә. Уҡыған әҫәрҙең йөкмәткеһе буйынса һорауҙарға яуап бирергә. Һүҙлек һүҙҙәрен белергә, уларҙы дөрөҫ ҡулланырға. Ҡала һәм ауылдағы яҙғы эштәр, ҡоштар, хайуандар һәм үҫемлектәр тормошо, яҙғы байрамдар тураһында әңгәмәләр үткәрергә. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатларға. |
| 5. | Дуҫлыҡ ҡәҙерен бел. (3 сәғәт) | 3 | | | Халыҡтар дуҫлығы тураһында текстар уҡырға, әңгәмәлә ҡатнашырға, диалог төҙөргә. Ысын дуҫлыҡтың зур мәғәнәгә эйә булыуын аңларға, уны һаҡлай белергә. Үҙеңдә яҡшы сифаттар тәрбиәләргә. Ҡылым |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | категорияларын үҙләштерергә. |
| 6. | Ауыл тормошо. (4 сәғәт) | 4 | | | Ауыл тормошо, ауыл кешеләренең көнкүреше, хеҙмәт, игенсе хеҙмәте тураһында әңгәмәлә ҡатнашырға. Игенсе эшенең нескәлектәрен, ауыл тормошоноң ҡала тормошонан айырмалы яҡтарын аңлатып һөйләй белергә. Икмәкте ҡәҙерләргә, икмәк тураһында мәҡәл-әйтемдәр менән танышырға. Һорауҙарға тулы яуап бирергә, диалог төҙөргә. Ҡылымды, һүҙбәйләнеш, һөйләм төҙөлөшөн үҙләштерергә. |
| 7. | Спорт. Спорт кәрәк-яраҡтары. (4 сәғәт) | 4 | | | Спорт, сәләмәтлек тураһында әңгәмәлә ҡатнашырға. Башҡортостанда спорт төрҙәре, спорт өлкәһендә данлыҡлы кешеләр, күренекле спортсмендар тураһында һөйләй белергә. Диалог төҙөргә. Башҡорт теленең үҙенсәлекле хәреф, өндәре, һөйләм төрҙәрен ҡабатларға, системалаштырырға. |
| 8. | Сәнғәт оҫталары. (3 сәғәт) | 3 | | | Сәнғәт оҫталары тураһында әңгәмәлә ҡатнашырға, данлыҡлы кешеләр тураһында һөйләй белергә. Йырҙар өйрәнергә. Эйәртеү теркәүестәре, теркәүестәрҙең дөрөҫ яҙылышын үҙләштерергә. |
| 9. | Исемең матур, кемдәр ҡушҡан? (2сәғәт) | 2 | | | Кеше исемдәре, тау, ер, һыу атамалары тураһында әңгәмәлә ҡатнашырға. Исемдәрҙең мәғәнәһе, уның кеше холоҡ-фиғеленә тәьҫир итеүен аңлата белергә. Данлыҡлы кешеләрҙең исемдәренә бәйләп, төрлө тарихи ваҡиғалар тураһында һөйләргә, әҫәрҙәр уҡырға. “Бәйләүестәр” темаһын үҙләштерергә, яңғыҙлыҡ исемдәрҙе ҡабатларға.<br>Уҡыған әҫәрҙең йөкмәткеһе буйынса һорауҙарға яуап бирергә. Һүҙлек һүҙҙәрен белергә, уларҙы дөрөҫ |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | ҡулланырға. Үҙҙәре йәшәгән ҡала, уның янындағы атамаларҙың мәғәнәләрен белергә. Тыуған төйәккә ғорурлыҡ тәрбиәләргә. Ер һәм ошо ерҙә йәшәгән халыҡтың тел үҙенсәлектәре, халыҡ тормошо, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары менән таныштырырға. Хәлдәрҙең һөйләмдә ҡулланышын күҙәтергә һәм практик үҙләштерергә. |
| 10. | Борон-борон заманда... (3 сәғәт) | 3 | | | Башҡорт халыҡ ижады буйынса белемдәрҙе арттырырға, һүҙ байлығын, һөйләү телмәрен үҫтерергә.Тексты аңлы ҡабул итергә һәм йөкмәткеһен һөйләй белергә. "Киҫәксәләр" темаһын үҙләштерергә. |
| 11. | Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ. (3 сәғәт) | 3 | | | Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ, халыҡ-ара булған мөнәсәбәттәр тураһында әңгәмәлә ҡатнашырға. Тема буйынса аңлап фекер йөрөтөргә һәм һөйләй белергә. Уҡылған әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһе буйынса фекер алышырға, һорауҙарға яуап бирергә. Мөнәсәбәт һүҙҙәрҙе, ымлыҡтарҙы үҙләштерергә. |
| 12. | Күҙгә эштәр һәм күҙгә күренештәр. (4 сәғәт) | | 4 | | Күҙ, күҙгә күренештәр тураһында ентекле итеп һөйләргә, белгәндәргә өҫтәп яңы мәғлүмәт бирергә. Тәҡдим ителгән тема буйынса текстар уҡырға. Муллыҡ, хеҙмәт тураһында яңы мәҡәл, әйтемдәр менән танышырға. Кеше тормошонда хеҙмәттең роле, күҙгә эштәр менән ғибәрәт икәнлеген аңларға, ололар һәм балаларҙың хеҙмәте тураһында уҡыусыларҙы һөйләргә өйрәнергә. Исемдәрҙе, ҡылымдарҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланырға. |
| 13. | Өфө менән танышыу. (5 сәғәт) | | 5 | | Тема буйынса яңы һүҙ һәм һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштерергә. Өфө ҡалаһы, уның үткәне һәм хәҙергеһе тураһында һөйләшергә. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | Башҡорт ҡылымдарының төҙөлөшөн практик үҙләштерергә. Уҡыған әҫәрҙең йөкмәткеһе буйынса һорауҙарға яуап бирергә. Диалогта ҡатнашырға. |
| 14. | Хеҙмәт төбө – хөрмәт. (4 сәғәт) | | 4 | | Кеше тормошонда хеҙмәттең роле, һайлаясаҡ һөнәр тураһында һөйләргә өйрәнергә. Республикабыҙ кешеләренең хеҙмәте, балаларҙың ололарға ярҙамы, һөнәрҙәр тураһында шиғырҙар, хикәйәләр уҡырға. Уҡыған әҫәрҙең йөкмәткеһе буйынса һорауҙарға яуап бирергә. |
| 15. | Беҙ ҡайтырбыҙ йондоҙҙарға әүерелеп... (4 сәғәт) | | 4 | | Башҡорт халҡының Бөйөк Ватан һуғышындағы ҡаһарманлығы, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына, батырҙарына ҡарата ихтирам, ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләргә. Уҡыусыларға һүҙлек менән эшләү күнекмәләре үткәререгә. Яңы үҙләштерелгән һүҙҙәр ярҙамында бәләкәй хикәйәләр, диалогтар төҙөргә. Текста хәлдәрҙе табырға. |
| 16. | Ергә мәрхәмәт – илгә бәрәкәт. (5 сәғәт) | | | 5 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашырға. Тыуған Республикаға ҡарата мөхәббәт, ғорурлыҡ тойғоһо, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләргә, улар тураһында һөйләргә, яҙырға өйрәнергә. Башҡортостандың ер аҫты, ер өҫтө байлыҡтары тураһында әңгәмәләр үткәрергә. Текста хәлдәрҙе табырға. |
| 17. | Башҡорт театры. (3 сәғәт) | | | 3 | Республикалағы театрҙар һәм уларҙың эшмәкәрлеге хаҡында дөйөм мәғлүмәт бирергә. Театрҙың күренекле артистарының тормошо һәм ижады менән танышырға. Текста өҫтәлмәлектәрҙе табырға. Тема буйынса яңы һүҙ һәм һүҙбәйләнештәре үҙләштерергә. |
| 18. | Башҡорт халыҡ ижады. (5 сәғәт) | | | 5 | Халыҡ ижады тураһында дөйөм төшөнсә бирергә. Фольклор һәм яҙма |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | әҙәбиәттең айырмаһын билдәләргә, улар тураһында һөйләргә өйрәнергә. Темаға ярашлы һүҙҙәрҙе хәтерҙә ҡалдырырға.<br>Диалогта ҡатнашырға. Һүҙлек һүҙҙәрен белергә, уларҙы дөрөҫ ҡулланырға. |
| 19. | Башҡорт аты. (2 сәғәт) | | | 2 | Башҡорт атының килеп сығыуы, тарихи үткәне менән танышыу. Йәш үҙенсәлектәре буйынса бүленеүен билдәләү, дөрөҫ әйтеү. Аттарға ҡарата ҡыҙыҡһыныусанлыҡ, улар тураһында күберәк белеү теләге булдырыу.<br>Темаға ярашлы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштерергә. Диалогта ҡатнашырға. |
| 20. | Башҡорт халыҡ милли аштары.(7 сәғәт) | | | 2 | Башҡорт халҡының милли аштары менән танышырға.Уларҙы әҙерләү үҙенсәлектәрен билдәләргә. Башҡорт милли аштары тураһында текстар менән танышырға. Темаға ярашлы һүҙҙәрҙе хәтерҙә ҡалдырырға.Диалогта ҡатнашырға.Һүҙлек һүҙҙәрен белергә, уларҙы дөрөҫ ҡулланырға.Ҡушма һөйләм тураһында төшөнсә бирергә. |
| 21 | Ай Уралым,Уралым..(6 сәғәт) | | 6 | | Тыуған еребеҙҙең сал тарихы барлығын, Башҡортостан тураһында рус яҙыусылары, “Урал” эпосы, һуңғы йылдарҙағы тарихи Башҡортостан ерендә үткәрелгән фәнни экспедициялар тураһында әңгәмәлә ҡатнашырға. Һорауҙарға тулы яуап бирергә, диалог төҙөргә. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе үҙләштерергә. |
| 22. | Йәмле йәй..(3 сәғәт) | 3 | | | Йәймиҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү. Уҡыусыларҙың һүҙ байлығын арттырыу, һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү. Тәбиғәтте күҙәтеү, алған тәьҫораттар буйынса фекер алышыу. Был айҙарҙа уҙғарылған Милли байрамдар менән |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | таныштырыу, улар тураһында белгәндәрен һөйләү. Балаларҙың йәйге ялы, хеҙмәте, ололарға ярҙамы тураһында әҫәрҙәр уҡыу һәм әңгәмәләр үткәреү. |
| 23. | Атамалар ни һөйләй. | | | 6 | Халыҡ ижады тураһында дөйөм төшөнсә бирергә. Фольклор һәм яҙма әҙәбиәттең айырмаһын билдәләргә, улар тураһында һөйләргә өйрәнергә. Темаға ярашлы һүҙҙәрҙе хәтерҙә ҡалдырырға. Диалогта ҡатнашырға. Һүҙлек һүҙҙәрен белергә, уларҙы дөрөҫ ҡулланырға. |
| 24. | Мин һәм минең ғаиләм. | 2 | | | Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ, халыҡ-ара булған мөнәсәбәттәр тураһында әңгәмәлә ҡатнашырға. Тема буйынса аңлап фекер йөрөтөргә һәм һөйләй белергә. Уҡылған әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһе буйынса фекер алышырға, һорауҙарға яуап бирергә. Мөнәсәбәт һүҙҙәрҙе, ымлыҡтарҙы үҙләштерергә. |
| | Бөтәһе (101) сәғәт | 34 | 34 | 33 | |